# Для Вас, родители!

## Бармаҡ уйындарының мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың телмәр үҫешенә йоғонтоһо

**Маҡсат:** *ата-әсәләрҙе балалар менән өй шарттарында бармаҡ гимнастикаһын үткәрергә өйрәтеү, ата-әсәләр араһында педагогик белемде пропагандалау.*
Бармаҡ менән уйнау һәм күнегеүҙәр-телмәрҙе үҫтереү өсөн уникаль сара. «Бармаҡ» гимнастикаһын ҡулланып текстарҙы өйрәнеү фекерләү, иғтибар, күҙ алдына килтереү һәләтен үҫтереүгә этәргес бирә. Бала шиғыр текстарын яҡшыраҡ хәтерләй, уның телмәре теүәл һәм сағыу була. Бармаҡ гимнастикаһы эшен башлар алдынан, балаларҙың төп шиғырҙар, йырҙар персонаждарын белеүенә инанығыҙ. Тәүҙә балаларға уйынсыҡтар йәки төҫлө һүрәттәр күрһәтегеҙ, шулай итеп балалар теге йәки был хайуандарҙың нисек булыуын иҫкә төшөрә алаһығыҙ, улар тураһында шаяртыу, йыр, шиғыр аша һөйләйәсәктәр. Һуңынан уны бармаҡ менән һүрәтләргә тәҡдим итегеҙ. Кәрәк булғанда, бармаҡ ярҙамында теге йәки был хайуандың нисек күренгәнен күрһәтергә кәрәк. Яйлап бармаҡ гимнастикаһын ҡатмарлаштырырға мөмкин: һеҙ шиғырҙың беренсе юлын уҡыйһығыҙ сабый ғәмәлдәрҙе һүрәтләй, һуңынан киләһе юлды уҡыйһығыҙ сабый икенсе ғәмәлде һүрәтләй һ.б. Шулай итеп бөтә шиғырҙы йәки йырҙы уйнарға мөмкин. Бындай уйындарҙы һәм күнегеүҙәрҙе һәр ваҡыт бәләкәй йәштәге балалар менән үткәрергә кәрәк. Яйлап бармаҡ гимнастикаһын ҡатмарлаштырырға мөмкин: һеҙ шиғырҙың беренсе юлын уҡыйһығыҙ сабый ғәмәлдәрҙе һүрәтләй, һуңынан киләһе юлды уҡыйһығыҙ сабый икенсе ғәмәлде һүрәтләй һ.б. Хатта иң бәләкәй уңыштары өсөн дә сабыйҙарҙы маҡтағыҙ.
Бала менән бармаҡ уйындары үткәреү буйынса тәҡдимдәр.

- Бала менән уйнар алдынан уның йөкмәткеһен тикшерергә кәрәк.
- Күнегеүҙе бала менән бергә башҡарырға кәрәк.



- Уйынды ҡабаттан үткәргәндә балалар йыш ҡына тексты өлөшләтә әйтә башлай  һүҙҙәрҙе хәрәкәт менән бәйләй.
- Балаларҙың йырлауын дәртләндерегеҙ

Бер ҡасан да мәжбүр итмәгеҙ.

- Бала алдында бер юлы бер нисә ҡатмарлы мәсьәлә ҡуймағыҙ.

Бармаҡ гимнастикаһы балаларҙы үҙ иғтибарын туплаға һәм уны дөрөҫ бүлергә өйрәтә, хәтерҙе, фантазияны үҫештерә.
Бармаҡ менән уйнау — балалар өсөн еңел һәм күңелле үҫеш ысулы. Сөнки балалар донъяны